Муниципальное автономное учреждение культуры
«Межпоселенческая центральная библиотека»
муниципального района Туймазинский район
Республики Башкортостан
Центральная детско-юношеская модельная библиотека

«Мәжит Гәфури – ялҡынлы публицист – һүҙ оҫтаһы»

«Гражданин, публицист, мастер слова – Мажит Гафури»

Литературный слайд – альманах, посвященный 140-летию классика башкирской и татарской литературы

http://aida.ucoz.ru

Мәжит Ғафуриҙың тыуыуына 140 йыл



Мәжит Ғафури – Башҡорт совет әҙәбиәтенең классигы, БАССР-ҙың халыҡ шағиры.



Ә
Г 26
МӘҖИТ
ГАФУРИ
ӘСӘРЛӘРЕ



МӘКТӘП
КИТАПХАНАҺЫ
Мәжит Ғафури
Өс повесть
БАШҠОРТОСТАН КИТАП НӘШРИӘТЕ ӨФӨ —



МӘҖИТ ГАФУРИ
МӘСӘЛЛӘР
ТАТГОСИЗДАТ
1952

Мәжит Ғафури
1880 йылдың
2 авгусында

Өфө губернаһы
Стәрлетамаҡ өйәҙе
(хәҙерге Ғафури
районы)
Елемҡаран
ауылында хәлфә
ғаиләһендә тыуған.

Шағирҙың белеме

Мәжит Ғафури 18 йәшендә Ырымбур губернаһы Троицк ҡалаһындағы «Рәсүлиә» мәҙрәсәһенә уҡырға килә.

Шағирҙың китаптары

1904 йылда Мәжит Ғафуриҙың «Себер тимер юлы» исемле шиғырҙар йыйынтығы баҫылып сыға.

(һүрәттә китаптың тышлығы)



سبر تیمر یولی

یاکه

احوال ملت

اثر عبد المجید ... الغفوری ...

اورنبورغ

... بن ... کریموف ...

۱۹۰٤

Мәжит Ғафуриҙың ижады башлан ук реалистик төҫ ала: ул әҫәрҙәрендә ярлы халыҡтың аһ-зарын тасуирлай, социаль тигеҙһеҙлек хөкөм һөргән йәмғиәткә протест белдерә.Батшаға ҡаршы сығыш яһап, ул Ҡазандан ҡыуыла.

1909 – 1917 йылдар Мәжит Ғафури Өфөлә «Шәреҡ» типографияһында корректор булып эшләй.1917 йылғы Октябрь революцияһын шағир ихлас ҡыуанып ҡаршылай.

Г.Тукай белән М.Гафури 1912 елда Уфа шәһәрендә беренче һәм соңгы тапкыр очрашалар

М. Гафури, С. Сүнчәләй, С. Рәмиев, З. Бәшири, Н. Думави. *1916 нчы ел.*

Шағирҙың дуҫтары

Дауыт Юлтый (һулда), Хәбибулла Ибраһимов һәм Мәжит Ғафури Чехов исемендәге санаторийҙа.1933 йыл.

1934 йылдың 28 октябрендә Мәжит Ғафури үпкә ауырыуынан Өфөлә вафат була. Уны ҡаланың А.Матросов исемендәге ял паркында ерләйҙәр.



Шағир рухы үлемһеҙ

Мәжит Ғафури һәм Башҡортостанда Совет власы өсөн көрәшеүсе революционер Шәһит Хоҙайбирҙин.

(рәссам Ғ.Мостафин картинаһы)



Мәжит Ғафури СССР яҙыусыларының беренсе съезында ҡатнашырға бик хыялланған.Лә-
кин ҡаты ауырыу сәбәпле бара алмаған.Съез-
дың асылыуын,М.Горькийҙың докладын ул радио аша ҡыҙыҡһыныу менән тыңлаған.

(Һүрәттә М.Горький һәм М.Ғафури.Рәссамы Ғ.Мостафин)

Шағир рухы үлемhеҙ

Башҡортостан хөкүмәте ҡарары буйынса 1953-1957 йылдарҙа СССР Фәндәр Академияhының Башҡортостан филиалының Тарих, тел hәм әҙәбиәт институты тарафынан башҡарылып, Ғафури-ҙың алты томлыҡ баҫмаhы сығарыла.

Шағир рухы үлемһеҙ

1973 йылда Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденлы Башҡорт дәүләт академия драма театрына Мәжит Ғафури исеме бирелә.

(театрҙың элекке күренеше)

Театр алдында Мәжит Ғафури һәйкәле.

Һәйкәлдең авторы – скульптор Л.Кербель

Шағирға арналған китаптар

Ғилемдар Рамазанов яҙған был әҫәрҙә башҡорт әҙәбиәтенең классигы Мәжит Ғафуриҙың тормошо сағылдырыла

Үҙем һәм халҡым

Бер аҙым алға баҫам да,

Әйләнәм мин артыма.

Ҡайҙа баҫҡандар икән тип,

Күҙ һаламын халҡыма.

Шул ваҡыт мин бик юғары

Ҡош кеүек, осһам әгәр,

Ә улар һаман шулай

Баҫҡан урынында

торһалар?..

1912

Я и мои друзья

Лишь сделаю я шаг вперед —

Как тотчас оглянусь назад:

Желая знать, куда шагнул,

К народу обращаю взгляд.

Что, если с птицей наравне

Лететь я буду в этот миг —

И вдруг увижу с высоты

Я все на том же месте их?

Шағир рухы үлемһеҙ

Мәжит Ғафуриҙың һикһәндән артыҡ әҫәре башҡорт, татар, урыҫ, ҡырғыҙ, сыуаш, латыш, мари, белорус, украин, үзбәк, ҡаҙаҡ телдә-рендә донъя күргән.









Составитель: Салихова Р.М.,
ведущий библиотекарь ЦДЮМБ

Использованы материалы из
свободного доступа сети Интернет